*Рауил БИКБАЕВ*



# *“Ҡанатланып оса һүҙҙәр...”*

## Иң беренсе мөғжизә

Мөғжизәләр күрҙем был донъяла,
Уларҙың кем белгән һандарын?
Хайран итә мине, таң ҡалдыра
Күпме кисем, күпме таңдарым.

Ете генә мөғжизә бар, имеш,
Бар тарихта! —
Аҡыл еткеһеҙ...
Башҡортостан!
Тик үҙеңдә генә
Мөғжизәләр һанап бөткөһөҙ.

Бихисаптыр ерҙең хикмәттәре —
Беренсеһе миңә шул булыр:
Туған телем мөғжизәһе генә
Тормошомдо йәмгә тултырыр.

Туған телем тәүге мөғжизә бит
Миңә генә түгел, ил өсөн.
Беренсеһеҙ булмай икенсеһе,
Беренсеһеҙ булмай меңенсе.

Телем бөтһә, ерем йәме бөтөр,
Мәғәнәһе ҡалмаҫ ғүмерҙең.
Берҙән-берем, йәнем —
Туған телем —
Иң ҙур мөғжизәһе был ерҙең.

Һинһеҙ йәшәү булырмы ни йәшәү?
Оҡшармы ни яҙым яҙыма?
Һәр бер өнөң, һүҙең, бөтә моңоң
Минең өсөн иң ҙур хазина.

Туған телһеҙ ниндәй бәхет ҡалыр?
Һүнер төҫтәр, тынып бар көйҙәр.
Туған телем,
Минең өсөн тик һин
Ерҙә иң беренсе мөғжизә!

## Ҡыҫҡа шиғырҙар



Еттем инде нисә йәшемә —
Һөйөүем уйнай һаман йәшенмәк.

* * *

Ҡайҙа Алып батырҙар?
Тулды алыпһатырҙар.

* * *

Һүҙе менән үгеҙҙәй һөҙөр,
Теле менән ҡылыстай телер.

* * *

Быуалар залимдар,
Тонсоға ғалимдар.

* * *

Әллә батша тиле,
Әллә иле тиле.

* * *

Белем алға ла әйҙәй,
Белем ҡулды ла бәйләй.

* * *

Һин хас та тулған айһың,
Балҡыйһың. Йылытмайһың.

* * *

Хәрәкәттә булған бәрәкәт.
Хәрәкәттә бөгөн һәләкәт.

* * *

Ҡанатланып оса һүҙҙәр,
Осто һүҙҙәр — ҡанатлылар!
Йөрәгемдән осҡандарын
Оҙатып ҡалам гел аптырап.

Ҡанатһыҙҙар тороп ҡалды,
Улар ҙа сыҡмаҡ өҫкәрәк.
Шуларҙы киләм өҫтөрәп.

Ҡайһылары ҡанатланыр?
Һүҙҙәргә ҡанат үҫтерәм.



*“Белмәйем,*
*Әллә Алла, әллә Иблес*
*Алдалай”*
*Шәйехзада Бабич*

Ҡул — яҡшылыҡ ҡылыр өсөн,
Күңел — нурға тулыр өсөн.
Күҙ — маҡсаттан яҙмаҫ өсөн,
Әҙәп — әҙәм аҙмаҫ өсөн.

Юл — туп-тура атлар өсөн,
Аҡыл — барыһын аңлар өсөн.
Тик ниңә һуң аҡыл етмәй
Шул аҡылды һаҡлар өсөн?

Аллаһ биргән аҫыл аҡыл —
Тик изгелек тыуҙырғаны.
Иблес биргән яһил аҡыл —
Емергәне, туҙҙырғаны.

Иң тейешен эҙләп кеше,
Сығып теше, төшөп теше,
Таҙарынып, аҙарынып,
Ғүмеркәйен уҙҙырғаны.

Тормош сыҡмай бер ҡалыптан,
Таң ата ла кис була шул.
Таңға йылмайған фәрештә
Кисенә иблес була шул.

* * *

Тағы ла эш тигәнем,
Эш күлдәген кейгәнем.
Таңдан билде биштән быуып,
Өтәләнгән, көйгәнем.

Юғал инде, утлы сөйәл —
Бөтмәҫ һорау-сөәлем!
Аҡ донъяға бер ҡарап тор,
Аҡ ҡайынға һөйәлеп.

Офоҡтарҙа моң сайҡала,
Тыңлап туйырлыҡмы ни?
Бер йөрәгемә был моңдоң
Барыһы һыйырлыҡмы ни?

Йөрәккәйем был йәмдәрҙе
Һыйҙыра алмай ярылыр,
Хайран ҡалып туҡталыр.

Сәмле эшем өҙөлөп ҡалыр,
Тәмле төш өҙөлөп ҡалыр.

* * *

Әллә ниндәй серле донъя сорнай,
Аңламаған телде тыңлаһам.
Ят тел ағышында ҡағыла миңә
Ғүмерем ишетмәгән моң-аһәң.

Бары бәхет, шатлыҡ тураһында
Ярһып-ярһып, өҙөлөп-өҙөлөп,
Һөйләй һымаҡ әле мин тыңлаған,
Мин белмәгән телдең һәр һүҙе.

Ул һүҙҙәрҙә һоҡланыу ҙа барҙыр,
Һыҙланыу ҙа күптер, моғайын.
Мин быларҙың береһен аңламайым,
Моңон ғына телдең тыңлайым.

Төшөнмәксе булып һөйләүсенең
Күҙҙәренә бағам аптырап.
Ҡарашында таныш кисерештәр —
Һүҙҙәрҙән дә күҙҙәр хаҡлыраҡ.

Күпте һөйләй ҡараш,
Тик күҙенә
Ҡарап булмай тотош милләттең.
Һәр халыҡтың ниҙәр уйлағанын
Һүҙҙәр генә һөйләр, тел әйтер.

Туған теле бергә тупламаһа,
Тарҡала ил, хәтерен юя шул.
Телһеҙ ҡалған, һүҙһеҙ ҡалған халыҡ
Күҙһеҙ ҡала, һүнә ҡояшы.

Әллә ниндәй серле донъя сорнай,
Аңламаған телде тыңлаһам.

Сит илдәрҙе бәлки хайран итмәҫ,
Килер быуындарға ғына етһен
Туған телемдәге моң-аһәң.